## Шиғри һүҙ

### ТЕЛӘКТӘШЛЕК

Әҙеүәт ҒӨБӘЙҘУЛЛИН,
Салауат районы, ҠараҒол ауылы

*Әссәләмү ғәләйкүм,*
*мөфтөй хәҙрәт!*
*Үә рахмәтуллаһу*
*Үә бәрәкәтуллаһу, Нурмөхәммәт!*
*Башҡортома аңлаттың һин*
*Динебеҙҙең аҡ нурҙарын.*
*Насип булһын артабан да*
*Аҡ бәхеттәр, бөйөк үрҙәре лә.*
*Шуны телә хөрмәт иткән*
*имамадарың.*
*Баш осонда ҡара болот ҡуйырһа ла*
*Бирешмә һин, алға атла*
*Дин юлында.*
*Шуны телә Хаҡ тәғәлә,*
*Ғәмһеҙлектән ҡасҡан халҡыбыҙ ҙа.*

*Сиге юҡтыр камиллыҡтың,*
*тип өйрәтә Ҡөрьән-Кәрим:*
*"Үҙең белһәң, өйрәт, ти ул,*
*күршеңә лә".*
*Сауап төшөр өйрәтеүсеһенә лә.*
*Уҡы Ҡөрьән, баҫ намаҙға,*
*эй, әҙәмғәт.*
*Хаҡ тәғәлә шулай*
*ҡуша һәммәбеҙгә.*
*Ауыр, әммә дәрәжәле ошо юлда*
*Терәк булайыҡсы, бер-беребеҙгә.*

### ИМАН ҠАЙТА

Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА

*Халҡым күңеленән беҙҙең илдә*
*Алып ташланылар иманды,*
*Нисә быуат әбей-бабайҙарым*
*Ошо иман менән йыуанды.*

*Зар иланы ауыл ололары*
*Манаралар ыңрап ауғанда,*
*Күңелдәрҙән иман үҫентеһен*
*Көслөк менән йолҡоп алғанда.*

*Манараһыҙ ҡалған мәсеттәрҙе*
*Мәктәп йә иһә клуб иттеләр,*
*Ул урындан фәрештәләр ҡасты,*
*Шайтандары йыйылып киттеләр.*

*Урынлашҡас иблис ялсылары*
*Керештеләр эшен эшләргә,*
*Иман орлоҡтары төшмәһен тип*
*Башланылар улар йәштәрҙән.*

*Әлифте таяҡ тип белмәгән*
*Үҫеп сыҡты беҙҙә өс быуын.*
*Халҡыбыҙҙың иманлы ҡатламы*
*Һыҡтанылар түгеп йөҙ һыуын.*

*Ауылдарҙа ҡалҡалар мәсеттәр,*
*Һис ҡурҡмайҙар намаҙ уҡырға,*
*Башланылар аңлы йәштәребеҙ*
*Ҡөрьән ҡушҡан юлдан атларға.*

*Иман булған ерҙә татыулыҡ бар,*
*Ары торһон алтын-көмөшө,*
*Иман бит ул беҙҙең көнитмештең*
*Айырылғыһыҙ бер өлөшө!*



## ФӘҺЕМ

Ф. АҠБУЛАТОВА
әҙерләне

### ИЗГЕЛЕК

Бынан байтаҡ йылдар элек ата-әсәһе үлгәндән һуң йәтим ҡалған малай хәйер һорап йөрөй. Асығып-һыуһап, хәле бөтөп, бер ишекте шаҡый. Ишекте асыусы ҡатындан эсергә һыу һорай. Уның ас икәнен күргән хужабикә бер стакан һөт бирә. Һөттө эсеп бөткәс, малай: "Изгелегегеҙҙе бер ҡасан да онотмаясаҡмын", тип рәхмәтен белдерә. Был хәлдән һуң күп йылдар үтә. Ҡатын да ҡартая, каты ауырып йығылғас, уны хастаханаға алып китәләр. Операция яһаусы табип шунда уның үҙенә һөт биргән ҡатын икәнен таный. Операция уңышлы үтә. Инде иҫенә килгән әбей хәсрәткә төшә: "Был тиклем ҡыйбатлы операцияға ҡайҙан ғына аҡса табырға?" Әбей ҡурҡа-ҡурҡа ғына үҙенә бирелгән иҫәп ҡағыҙын аса... ә унда: "бер стакан һөт менән түләнгән", тип яҙылған була!

### МАЙМЫЛ АҠЫЛЫ

Шәрек илдәрендәге боронғо яҙмаларының береһендә һунарсы һәм маймылдар тураһында ҡисса бар.

Һунарсылар маймылдарҙың тәбиғәтен, фекерләү кимәлен якшы белә икән. Улар маймыл ҡулы һыйырлыҡ ҡына тар ауыҙлы бер нисә көршәк алалар. Көршәктең төбөнә ризык һалып, маймылдар йөрөгән юлдарға теҙеп сығалар. Тегеләр көршәкте күреү менән ҡулдарын тығырға ашығалар. Буш ҡул еңел генә инһә лә, нимәнелер услағандан һуң йоҙроҡто тартып алып булмай. Маймылдар йоҙроҡтарын тартып сығара алмайҙар. Һунарсылар уларҙың янына килеп баҫа. Януарҙар уларҙың үҙҙәренә нисек яҡынлашҡандарын да күрә, аулауҙарынан ҡурҡҡан хәлдә лә, усты яҙып, ризыкты ысҡындырып ҡасып китеү мөмкинлеге баштарына ла килмәй. Һаман услағандан нәмәләрен көршәктән сығарып матшалар. Ләкин был мөмкин түгел. Әлбиттә, һунарсылар уларҙы мәшәҡәтһеҙ генә аулайҙар, артабан муйындарына бау бәйләп бейергә өйрәтәләр. Шулай итеп, маймылдар һунарсыларҙың мәңгелек ҡолдарына әүерелә́ләр.

Кешеләр араһындағы мөнәсәт тә шуны хәтерләтә. Беҙҙе Остазға, хәҙрәткә йүнәлтһәләр ҙә, беҙ был донъяның алдатҡыс, быҫраҡ байлығынан баш тарта алмайбыҙ. Сат йәбешәбеҙ. Ә уны бит ҡалдырырға ла кәрәкмәй. Беҙ фәкиргә әйләнмәйбеҙ, бөтән эш кешенең аҡылында. Байлыҡ йәбешер өсөн түгел, ә ҡулланыр өсөн генә бирелә, һәм һис кенә лә үҙенден нәфсеңә буйһоноуҙы аңлатмай.

## Уйлан

# ФАНИ ҒҮМЕРЕБЕҘ...

### диңгеҙҙәге бер тамсы ғына

Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА,
Бөрйән районы

Бер уйлаһаң, кеше ғүмере оҙон-оҙаҡ һымаҡ, икенселәй уйлаһаң, ул - икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙҙәге бер тамсы ғына. Дөрөҫ ғилем алмау, бақса-мәктәпттәрҙә дин нигеҙҙәре уҡытылмау, атай-әсәйҙәрҙең, хатта олатай-өләсәйҙәрҙең дини ғилеме самалы булыу сәбәпле, беҙҙең аңға ошо уйҙырма һеңгән: йәнәһе, беҙ был донъяла күпмелер йәшәйбеҙ ҙә, үлгәс, сереп тупраҡ булабыҙ һәм - вәссәләм.

Шуға күрә күптәр, бигерәк тә быуыны нығынып етмәгән, етерлек аҡыл тупламаған, донъя күрмәгән йәш-елкенсәк үҙ алдына килеп баҫҡан проблеманан еңел генә "котолмаҡсы" - үҙен-үҙе үлтереп, көрсектән сыҡмаҡсы була. Барыһы ла ошолай "еңел" генә булһа, үлемдән һуң йәшәү булмаһа, донъяның аҡыллы баштары күптән суицидты көрсектән сығыуҙың иң оптималь юлы тип иғлан итер ине әле. Эш быныһ менән генә бөтмәй шул: үлгәндә йән биреү, ҡәберҙә фәрештәләргә яуап биреү, Ҡиәмәткәсә (ә уның ҡасан етерен Аллаһтан башҡа бер кем дә белмәй) ҡәберҙә ғазап ситеү (үҙ-үҙен үлтергән кешене ҡәберҙә даими ғазаптар көтә), Ҡиәмәт көнөндә ҡәберҙән ҡубарылыу, мәхшәр майҙанында Аллаһ алдында яуап тотоу, ҡылғандарыңа бәрәбәр йә тамуҡлы (тәүбә), йә ожмахлы булыу көтә һәр бәндәне.

Тамуҡҡа эләгәсәк йәндәрҙең хәлен аңлатып тораһы ла түгел: Аллаһҡа ышанмаған, бәйғәмбәрҙәр һүҙенә ҡолаҡ һалмаған, Ҡөрьәндең бер аятын да уҡып, аңлап ҡарамаған, намаҙ ҡылмаған, ураҙа тотмаған, байлығынан ярлыларға зәкәт түләмәгән, изге эштәр ҡылмаған, ата-әсәһен рәнйеткән, кеше малына ҡул һуҙған, хәмер менән зинаны, отош уйындарҙы, процентка аҡса ашауҙы, донъя байлығын, кәйеф-сафаны яраткандарҙың күрәһеләре бик хәтәр буласаҡ (бынан Аллаһ үҙе һаҡлаһын!) Ошоларға өҫтәп, үҙенә-үҙе ҡул һалыуын да ҡушһаҡ, был кешеләргә ожмахтың ишек төбөн дә күреү юҡ. Мөхәммәт с.ғ.с. әйткән: "Ныҡ яраланған бер кеше, ауыртыуҙарға сыҙамай, үҙен-үҙе үлтерә, шул саҡта Аллаһ әйтә: "Минең ҡолом үҙ теләге менән минең алдыма сыкты, йәғни вакиғаларҙы тиҙләтергә теләп, үҙенең ғүмерен ҡыйҙы, шуға күрә мин уға ожмахты тыйҙым, йәғни ул ожмахҡа инмәйәсәк", - ти.

Аллаһ тыйғандарҙан тыйылмағандарҙы киләсәктә яза һәм ыҙа көтә. Бәй, шулай булғас, ниңә әҙәм балаһына Аллаһ тарафынан бирелгән иң изге нәмәгә - йәнгә йәбешергә, үҙ ғүмерен үҙе ҡыйып, мәңге тамуҡлы булырға? Был донъялағы ғүмеребеҙ ҡыҫҡа ғына булһа ла, баҡый донъя бит мәңгелек. Беҙҙең был донъялағы ғүмеребеҙ баҡый донъялағы менән сағыштырғанда диңгеҙҙәге бер тамсы ғына. Иманлылар өсөн был донъя - тамуҡ, теге донъя - ожмах, ти дин. Был донъяла фәҡир булғандар, өлөштәре аҙҙар теге донъяла кафыр булып Аллаһты, уның барлығын, берлеген инкар итеп, кеше өлөшөн ашап, зина ҡылып, урлыҡ менән булып, етемдәрҙе рәнйетеп, байлығынан зәкәт түләмәй маһайып йөрөүселәрҙе тамуҡ ғазаптары, бөтмәҫтәкәнмәҫ ыҙа көтә. Шуға ла диндар ата-бабаларыбыҙ донъя малына ҡыҙмаған, ятып инер өйө, ейер ризыгы, өҫтөнә бер ҡат кейеме булһа, киләсәген ҡайғыртҡан - ахирәтен уйлаған: намаҙ уҡыған, ураҙа тотҡан, етем-еһерҙе ҡараған, күберәк изге эштәр эшләп сауап алырға тырышҡан. Уйлап ҡараһаң, күпме генә бай булһан да бер юлы ике машинаға ултырып йөрөмәйһең, ике диванда ятып йоҡламайһың, ике тун кейеп йөрөмәйһең, ашҡаҙан лыҡа тулһа, уның ситенә ашап булмай...

Аллаһ беҙгә тәүлегенә 24 сәғәт биргән икән, ниңә намаҙға ярты сәғәт булмаҫҡа? Мин үҙем эшләйем, үҙем ашайым, тип кәпәренә бәгзе берәү. Ә Аллаһ һиңә ошо һау-сәләмәт тәнде, аҡылды, кейемде, ризыкты бирмәһә, ни эшләр инең? Беҙ бөтәбеҙ ҙә Аллаһтың ниғмәтәренән булған файҙаланабыҙ: һауаны һулайбыҙ, уны бер кем дә консервага тултырып һатып бирмәй, һыуын эсәбеҙ (шәкәр, беҙҙә ул бушлай), еләк-емешен, үлән-бәшмәген йыябыҙ, һыу инәбеҙ, ерҙән йөрөйбеҙ. Быларҙы беҙгә кем биргән һуң? Ошо һәм башҡалар хаҡында донъя эштәренән, мәшәҡәттәренән саҡ ҡынаға булһа ла айырылып, уйланырға ваҡыт таппайбыҙ.

Үҙ ҡолағым менән ишеткәнем бар. Намаҙлыкта ултырырға тейешле әбейҙәр: "Эй, бармы икән ул теге донъя, унда кем барып ҡайтҡан? Намаҙҙы, ана, кемдең гонаһы күп, шулар уҡыһын, намаҙ уҡып, ураҙа тотмаһаҡ та, Аллаһы Тәғәлә бер ерәнә ҡуйыр әле", - тип кенә ебәрәләр, тәүбә, әстәғфируллаһ. Аллаһҡа ышанмаған, уның барлығына, Ҡиәмәт көнөнә ышанмаған, Ҡөрьән хөкөмдәрен инкар иткән, хет башҡорттан, хет үзбәктән тыуһын, тәүбә итеп төҙәлмәһә, инде мосолман түгел. Иманлы кешегә Аллаһтың "ҡайҙа булһа ла ҡуйыуы" кәрәк түгел, иманлы кешегә фәҡәт ожмах кәрәк һәм ул уға ынтылып йәшәй!

Ғүмерҙе лә, йәнде лә Аллаһ бирә. Аллаһ биргәнде ҡыйырға беребеҙҙең дә хаҡы юҡ. Яман сиргә юлығыусылар, улар ауырыу ғазаптарына түҙә икән, үҙ үлеме менән үлһә, уларҙы теге донъяла ошо сабырлыҡ, сир ыҙалары бәрәбәр рәхәттәр көтә. Һәр проблема, һәр сир, яҡындарҙың үлеме беҙгә һынау булараҡ ебәрелә. Сабыр итеп түҙһәң, әжер-сауабы ҙур, түҙемлеген етмәй икән - аҙағы үкенес. Сер түгел, һуңғы йылдарҙа йәмғиәттә суицид осрактары бар. Быныһ төп сәбәбе - халыкта тейешле дини ғилем юҡлыкта. Шөкөр, мәсеттәр асыла, йәштәр иман юлына баҫа, әммә күпселек әле урам, ғаилә, телевизор, интернет тәрбиәһендә. Мәсеткә дәрес алырға йөрөүселәр ҙә бармаҡ менән һанарлыҡ. "Балаларымдың башына камил аҡыл, файҙалы ғилем бир, иман байлығынан айырма", - тип доға ҡылған ата-бабаларыбыҙ. Файҙалы ғилем тигәне ана шул дөрөҫ дин ғилеме инде. Был ялбарыуҙың ниндәй мәғәнәгә эйә булыуы тураһында онотмайыҡ - еребеҙҙә үҙенә-үҙе ҡул һалғандар кәмер, тамуҡлылар һаны артмаҫ.

## Сәләмәтлек

# ҠИММӘТЛЕ ГРАНАТ



(Аҙағы.
Башы ноябрь һанында).

Гранаттың әскелтем-тәмле һуты аппетитты аса, ашҡаҙандың эшкәртеү һәм аҙыкты үҙләштереү һәләтен көйләй, шуға ла был емеште аш алдынан ҡулланалар. Десерт өсөн дә гранат - бик ҡулайлы емеш.

Йүткереү, һалкын тейеү, тапма тотоу осраҡтарында ла гранат емештәрен ҡулланыу тәкдим ителә. Гранат һуты тапма биҙгәге мәлендә сарсауҙы баҫа һәм бер үк ваҡытта температура төшеүгә булышлыҡ итә.

Халыҡ медицинаһында татлы гранат һутын бөйөр ауырыуҙары осрағында, ә әскелтемен - бөйөрҙә һәм үт ҡыуығында таш булғанда файҙаланалар.

Гранаттың емеше лә, ҡабығы ла танин тигән үҙенсәлекле матдәгә бай. Танин микробтарға, ялҡынһыныуға ҡаршы тороусанлыкты арттыра, тән яраланған, бешкән осраҡта тиҙ уңалтыу һәләтенә эйә. Шуға ла ул теш ҡаҙнаһы зарарланғанда, тамаҡ шешкәндә, шеш эренләгәндә бик файҙалы.

Анар һуты һәм ҡабығын ҡайнатып алған һыу - дизентерия ауырыуҙарына ҡаршы алыштырғыһыҙ дауа, косметологияла тән тиреһе тартылыуы өсөн ҡулайлы сара булараҡ та әһәмиәтле.

# КӨН ХӘҘИСЕ

**"Әгәр кеше алдауҙан һәм ялған, яһил эштәрҙән баш тартмаһа, Аллаһҡа кешенең ашау-эсеүҙе ҡалдырыуы кәрәкмәй".**

**Әл-Бохари, Әбү Дауыт килтергән хәҙис.**

"Ожмах әһелдәре араһында кем буласағын хәбәр итергәме һеҙгә? Былар пәйғәмбәр, әүлиә, Аллаһ юлында шаһит, Аллаһ өсөн алыҫ йәшәгән мосолман туғанды барып күргәләй торған кеше.

Һәм был һеҙҙең бала тыуҙырған рәхимле ҡатындарығыҙ, улар һеҙҙең менән әрләшкәндән һуң, үҙҙәре килеп, ҡулдарын һеҙҙең ҡулдарығыҙға һалып әйтәләр: "кәнәғәтһеҙлегең миңә бәйле булыу сәбәптән йоҡлай алмайым".

**Ән-Нәсаи килтергән хәҙис.**